Гүзәл СИТДИҠОВА

# Йәннәт баҡсаһы

## Ул — берҙән-бер...

*Бисмиллаһир-рахманир-рахим!*
*“Ул — Аллаһ — бер,*
*Аллаһ мәңгелек,*
*Ул тыуҙырманы һәм тыуҙырылманы,*
*һәм бер кем дә Уға тиңдәш булманы!”*

Хаҡ Тәғәләнең иҫ киткес камил, һүҙе түгел, бер өнө лә артыҡ булмаған “формулаһы”, билдәләмәһе был. Ул дәүер бәндәләре кеше һынында, бала тыуҙырған (тәүбә-тәүбә!) итеп күҙ алдына килтергән иң юғары көс хаҡында уҡый-яҙа белмәгән ҡәҙимге сүл ғәрәбе шундай ябай һәм шундай теүәллек, тәрәнлек, бөтөнлөк менән үҙе әйтә алмаҫ ине — Алланан ғына килеүе мөмкин был сүрәнең. Ҡөрьәндәге “Әл-Ихлас” сүрәһен ҡат-ҡат уҡып, хайран ҡалам, һоҡланам. Ҡөрьән аша Аллаһы Тәғәлә беҙгә кеше телендә өндәшә, Ул яралтҡан донъяның беҙ күргән һәм күрмәгән, аңлаған һәм аңламаған, тойған һәм тоймаған ҡанундарын әшкәртә. Эйе, беҙ Хаҡ Тәғәлә ҡөҙрәтенең емештәрен генә күрәбеҙ, ә үҙен күрер һәләткә эйә түгелбеҙ. Беҙҙең күҙәнәгебеҙҙә йәшәгән вирус та, аңлы булһа, беҙҙе тотош күрә, аңлай алмаҫ ине. Аллаһ — анау тиклем ғаләмде барлыҡҡа килтереп, үҙенә буйһондороп торған ҡөҙрәт бит ул. Беҙ бары тик зиһенебеҙ еткән тиклем уның сифаттарын ғына белергә һәләтле. Алланың исемдәре, йәғни Исме-Әғҙәм доғаһы аша хәбәр ителгән беҙгә был сифаттар. Ғаләмдең иге-сиге юҡ, әммә ғалимдар уның башланған осоро барлығын, шартлауҙан һуң барлыҡҡа килгәнен хәҙер инде тулыһынса иҫбатланы. Шул шартлауҙы булдырыусы көс — Аллаһ ул. Ғаләм дә, кеше ише, үҫә, киңәйгәндән-киңәйә бара. Башланған нөктәһе бар икән, бөтөр нөктәһе лә бар.

### Беҙҙең тәнебеҙ — үҙе бер ғаләм

Күҙәнәгебеҙҙә бер нисә секунд ҡына йәшәп, шул арала үрсеп өлгөргән вирус өсөн беҙ мәңгелек һәм сикһеҙ тойолор инек, ғаләм иһә беҙҙең өсөн шулай. Тәнебеҙҙәге күҙәнәкте Өфө тиклем ҙурайтһаҡ, беҙ иҫ киткес камил комбинат — беҙҙе йәшәтер өсөн секундтан да ҡыҫҡа ваҡыттар эсендә һанһыҙ функциялар башҡарып өлгөргән гигант комбинат күрер

инек. Улар тәнебеҙҙә миллиардтарса, әммә бер-береһенең хәлен белеп тора, бер маҡсатка — беҙҙе йәшәтеүгә хеҙмәт итә. Был мөғжизә түгелме ни! Улар һәр береһе айырым да йәшәй алыр ине. Әммә бергә тупланып, мине, һине, беҙҙе хасил итә, беҙгә хеҙмәт итә. Беҙ бит уларға идара итә алмайбыҙ. Ниндәй көс, ниндәй энергия тота һуң уларҙы? Яуап бер — Аллаһы Тәғәлә.

**Мөхәммәт ғәләйһи үә сәлләм — һуңғы пәйғәмбәр**

Дин әҙәм заты яралтылғандан йәшәй — кешелек донъяһы өсөн Хаҡ Тәғәлә биргән ҡанундар тупланмаһы ул. Аңһыҙ донъя, әйтәйек, йондоҙҙар, планеталар Аллаға уйланмай ғына буйһона — миллиондарса йылдар ул ҡушҡан траектория, тиҙлек буйынса хәрәкәт итә лә итә. Ә әҙәми зат, Алланың иң яратҡан ҡоло булараҡ, аң менән бүләкләнгән, шуға ла һайлау хоҡуғына эйә. Ә һайлау хоҡуғы — иҫ киткес яуаплылыҡ ул, сауаптар эйәһенә лә, иблис ҡолона ла әүерелеүең мөмкин. Ниҙе тыйғанын, ниҙе рөхсәт иткәнен Хаҡ Тәғәлә пәйғәмбәрҙәре аша изге китаптар ебәреп, хәбәр итеп торған. Китап бәндәселек менән боҙолған һайын яңы рәсүл ебәрелгән. Мөхәммәт ғәләйһи үә сәлләм — һуңғы пәйғәмбәр, ахырызаман пәйғәмбәре, сөнки уның аша кешелеккә заман ахырынаса рухнамә, ҡануннамә булырға тейешле иң камил китап — Ҡөрьән Кәрим ебәрелгән.

**Монафиҡтар борон да булған**

Байтаҡ кеше диндә йола үтәүгә генә ҡайтарып ҡалдыра. Был беҙҙең атеизмдан имгәнгән рухыбыҙ өсөн тәбиғи күренеш. Иҡтисади ауырлыҡтар килеп сыҡҡас, бәғзе берәүҙәр бер-ике сүрә өйрәнеп алыу менән, бит һыйпап ҡына аҡса эшләргә оҫтарып алды. Хатта хажиҙар араһында ла ихлас инаныстан түгел, ниндәйҙер донъяуи маҡсаттар менән йөрөүселәр осрай. Аллаһ тулы иман бирһен дә үҙе ярлыҡаһын уларҙың гонаһтарын. Борон да булған монафиҡтар, йәғни ике йөҙлөләр. Был хаҡта Ҡөрьәндә лә әйтелгән. Тап шул монафиҡтар рухиәткә иң ҙур зыян килтерә лә инде. Дин әһеле булып йөрөгәндәре — бигерәк тә. Әммә бөгөн шуны яҡшы аңлайым: бер мулланың гонаһы өсөн дә Хаҡ Тәғәлә алдында мин яуап тотмаясаҡмын, ә бары тик үҙем һәм балаларым өсөн генә яуаплымын. Мулла ла — бәндәүи зат, кәмселекхаталарҙан азат түгел.

Шул мулла улай иткәйне, былай иткәйне, тип, мин Аллаһ алдында үҙ яҙығымды аҡлай алмаясаҡмын.

**Башҡорттоң дине — фиғелендә**

Башҡорт халҡының дине — ҡанында. Үҙ теләге менән Исламды ҡабул иткән дә уға бер ваҡытта ла хыянат ҡылмаған. Хатта көсләп суҡындырған заманда ла. Совет осоронда ла йәшереп намаҙ уҡыныլар, ураҙа тоттолар. Ҡайһы бер урыҫ ғалимдарының: “Башҡорттар мосолман һаналһа ла, дини йолаларын бик үтәмәй”, — тигәне шул йәшеренлек арҡаһында ул. Шул арҡала суҡындырылыуҙан да һаҡланып ҡалғандар. Зәки Вәлиди үҙ ғәскәрендә булған бер хәлде “Хәтирәләр” китабында иҫкә төшөрә: яуҙан һуң уларҙың ҡулына төшкән эшелонда

цистерна-цистерна араҡы булыуы асыҡлана. Уны башҡорт яугирҙары яҡын-тирәләге урыҫтарға биҙрәләп һатып бөтөрә, бер иҫерек хатта цистернаға батып үлә, әммә бер вәлидовсы ла иҫерткескә ҡағылып та ҡарамай.

**Дингә юл һәр саҡ асыҡ**

Кешенең ни кимәлдә динле булыуын Хаҡ Тәғәлә үҙе генә белә. "Һуғышсан дәһрилек"тән һуң дингә килеүе еңел түгел. Үҙем дә төплө инаныуҡа килә алмай байтаҡ яфаландым. Аллаһы Тәғәлә барын тоя инем, ә ил сәйәсәте быны инҡар итте, динлеләрҙән көлдө. Нығынып етмәгән йәш кешенең башын бутау еңел бит ул. Ә дингә ҡапҡалар асылғас, заман фәндәре кимәлендәге әҙәбиәт етешмәне, дин әһелдәренең йәмһеҙ ҡылыҡтары күңелде ҡайтарғыланы. Бәхетемә, выждан ирке мәсьәләләре менән шөғөлләнгән комитетҡа эләктем, депутат буларак, тәүге әҙерләгән закон проектым да ошо хаҡта булды. Сифатлы, төплө дини әҙәбиәт (әйткәндәй, төрлө диндәрҙеке) ҡулыма килеп инде. Шуларҙы уҡый-уҡый берҙән-бер көндө Аллаһы Тәғәләнең барлығына, Исламға тамам инаныу халәтенә еттем дә, ни тиклем дөрөҫ йәшәмәгәнебеҙгә, үҙемдең хаталарыма тетрәндем.

**Милләт һәм дин — бер бөтөнлөк**

Аллаһы Тәғәлә бер булған кеүек үк, уның кешелек өсөн төшөрөлгән ҡанундары ла, йәғни дин дә — бер үк. Заманса әйткәндә — "дөйөм кешелек ҡиммәттәре". Беҙ динебеҙгә тоғро булырға тейешбеҙ. Ә улай булғас, милләт бөтә инде, ти ҡайһы берәүҙәр. Әкиәт. Аллаһы Тәғәлә кешеләрҙе үҙе төрлө раса, төрлө милләт итеп яралтҡан, донъя яралтылырҙан меңдәрсә йыл әүәл үк һәр беребеҙҙең ниндәй замандаа, ниндәй Ватанда, ниндәй милләттән, ниндәй ата-әсәнән тыуырыбыҙҙы билдәләп ҡуйған. Ошо була ул — тәҡдир. Быларҙың һәр береһен ул беҙгә аманат итеп тапшырған. Балаларыбыҙ, хәләл ефетебеҙ, йәнебеҙ-тәнебеҙ, эшебеҙ, туғандарыбыҙ, күршеләребеҙ, таныштарыбыҙ, хеҙмәттәштәребеҙ, ер үҙе — беҙгә аманат. Аманатҡа хыянат ҡылма: был — диндән. Зәки Вәлиди үҙенең хушлашыу хатында юҡҡа ғына милләтебеҙгә: "Динде, телде һаҡлағыҙ", — тип әйтеп ҡалдырмаған. Дин ул — рух ныҡлығы, иманлылыҡ, улар бар икән, тел дә, милләт тә йәшәй. "Минең ҡушҡандарымды үтәмәһәгеҙ, Мин һеҙҙе башҡа халыҡтар менән алыштырырмын", тигән Аллаһы Тәғәлә. Бына ҡайҙа ул бөтөү ихтималы!

**Дин һәм шәхес**

Салауат Юлаев көндәренә килгән эстон йырсыһы ҡаһарман яҡташтарыбыҙға хайран ҡалып һөйләгәйне. Рогервик утрауындағы тотҡондар, ауыр шарттарҙы күтәрә алмай, бер йыл эсендә донъя менән хушлаша торған булған. Ә беҙҙекеләр ике тиҫтә йыл самаһы ошо ғазаптарҙы күтәргән. Элек тойомлай ғына инем, хәҙер дәлилдәр табылған: милли батырыбыҙ, уның атаһы Юлай Аҙналин һәм арҡаҙаштары ғибәҙәт ҡылыр урын эшләп, телдәре, танауҙары ҡырҡылһа ла, намаҙ уҡып йөрөгәндәр. Алланың ҡушҡандарына, яҙмыштарына иҫ киткес тәҡүәлеге, сабырлығы

менән улар ғүмерен оҙайтҡан, һынмаған, ауырлыҡтарға буйһонмаған. Уйлап ҡараһаң, Салауатҡа 22 генә йәш була. Һөйөклө Ватанынан айырылған, ғәрипләнгән, көн дә ауыр һәм мәғәнәһеҙ эш, һаҙлыҡтағы һыуыҡ, ҡараңғы зиндан, төрмә ашы...

**Дин — йола ғына түгел**

Ҡайһы саҡ ишеткеләйһең: бына мин Аллаға ышанам — хәйер бирәм, Ҡөрьән ашы үткәрәм, ә башыма ҡайғы-хәсрәт төшөп кенә тора. Онотҡанда бер хәйер биреп, ашҡа йыйып ҡына Алланы һатып алмаҡсы булалармы был кешеләр? Әллә, ҡайғы-хәсрәт динһеҙҙәргә генә бирелә, тип уйлайҙармы? Еңелме, ауырмы яҙмышың — уны Аллаһы Тәғәләгә инаныс менән уҙыу фарыз. Салауат Юлаев кеүек. Ерҙәге тормош — ул беҙҙең һынау, мәңгелеккә әҙерлек. Фанилыҡтағы һәр миҙгелебеҙ мәңгелеккә нигеҙ булып тора. Бер секундлыҡ гонаһыбыҙ өсөн миллиондарса йыллыҡ ғазаптар алыуыбыҙ ҙа мөмкин, Аллам һаҡлаһын. Ә динле кеше менән динһеҙҙең араһында бер генә айырма — намаҙ. Уҡымай икән, тимәк, дингә инеп етмәгән, Алланың барлығына инаныҫы тулы түгел.

**Гонаһлылыҡ гонаһһыҙмын, тигәндән башлана**

Шулай тигән Инәбеҙ Ғәйшә раҙыйаллаһу ғәнһә. Телевидениеға биргән интервьюмда: ”Мин дингә хаталар аша килдем”, — тигәйнем. Был ысынлап шулай — ”Бәндә хатаһыҙ булмаҫ” тигән әйтем юҡтан тыумаған бит ул. Динлеләр ҙә хата, хата ғына түгел, гонаһтар яһай, сөнки беҙ нәфесле итеп яралтылғанбыҙ. Бары тик динле кеше зиһене, белеме, тәрбиәһе еткәнсә үҙендәге етешһеҙлектәргә ҡаршы туҡтауһыҙ көрәш алып бара, Хаҡ Тәғәлә ҡушҡанса йәшәргә тырыша. Ә динһеҙҙәрҙең күбеһе, хатам асылмаһа ярай, тип йәшәй, үкенә лә белмәй. Бөгөн мин дингә килдем, динде белмәгәнлектән эшләгән хаталар, гонаһтар аша килдем. Динде нығыраҡ белгән һайын күҙем асыла бара, тетрәнеүем арта, тәүбә итәм, миһырбан-шәфҡәт Эйәһенең ярлыҡауын ялбарам, шуға өмөт итәм. Изгелектәр ҡылып, яҙыҡтарымды йыуҙыртырға тырышам. Динһеҙ кеше тәүбә итмәйәсәк һәм гонаһтарын да йыуҙырта алмаясаҡ. Бар ғилләә шунда.

**Алланы яратып инанам**

Дингә кешене ихтыярһыҙлап килтерергә ярамай. Ихластан ышанмаясаҡ ундай кеше. Ҡөрьәндә лә шулай тип әйтелгән. Әммә аңлатыу, заман телендә аңлата белеү кәрәк. Мәҫәлән, ябай әҙәми зат ҡына беҙҙең һәр аҙымыбыҙҙы, тауышыбыҙҙы яҙып ала икән, ниңә беҙ ошо икһеҙ-сикһеҙ донъяны яралтҡан, бер секундҡа ла уны үҙ ихтыярынан ситкә ебәрмәгән Хаҡ Тәғәлә шуны эшләй алмай, тип уйлайбыҙ? Изге китаптарҙа әйтелгән бит, Аллаһ хатта ҡырмыҫҡаның табаны аҫтында нимә барын белеп торор, тип. Беҙ унан бер ниҙе лә, хатта уйыбыҙҙы ла, йәшерә алмайбыҙ. Ә беҙ һәр саҡ тик яҡшылыҡ ҡылабыҙмы ни? Ғәйбәт һөйләмәйбеҙме (ә был кеше итен терелә ашауға тиң, тәүбә-тәүбә), һүҙ йөрөтмәйбеҙме, ата-әсәгә хөрмәт күрһәтәбеҙме, туғандар менән татыу йәшәйбеҙме, үс тотмайбыҙмы, көнләшмәйбеҙме? Нисә суҫҡа ашап

бөтөрҙөк, нисә йәшник хәмер түңкәрҙек? Бер тапҡыр ҙа әҙәпһеҙ ҡыланманыҡмы, аманатҡа хыянат ҡылманыҡмы? Вәғәҙә иттек тә — үтәнекме? Тормошобоҙға туҡтауһыҙ зарланыу менән булмайбыҙмы? Көнөбөҙҙө йондоҙнамә уҡыуҙан, йәғни сихырҙан башламайбыҙмы, ырым-шырымға ышанмайбыҙмы? Һанап бөтөрөрлөк түгел гонаһтарыбыҙҙы. Кеше итен ашаған өсөн прокурор алдына баҫтырһалар, ҡурҡмаҫ инекме? Алланан да ҡурҡырға кәрәк. Был — инаныстың тәүге баҫҡысы. Хәҙер инде Хаҡ Тәғәләне яратыу кимәлендә инанам. Биргән яҡшыһы өсөн дә, яманы өсөн дә. Былар барыһы ла мине һынар өсөн генә бирелгән бит, һәм Ул шуны аңлар дин дә биргән. Шуның өсөн мөхәббәтем ҙур Хакимыбыҙға. Динде сәйәсәткә әйләндерәләр икән, Аллаһ түгел, беҙ ғәйепле — иблискә хеҙмәт итәбеҙ, тимәк.

**Заман етәксеһе динде инҡар итмәй**

Әгәр халыҡтар, йәнә илдәр етәкселәре динле булһа, тормошобоҙ күпкә яйлыраҡ булыр ине кеүек. Был тиклем дә оятһыҙлыҡ, вәхшилек хөкөм һөрә алмаҫ ине, моғайын. Илдәр илдән өҫтөн булырға тырышыуҙар, бер-береһенә һуғыш асыуҙар, өлөшөн киҫергә тырышыуҙар, байлығына ымһыныуҙар — былар һәммәһе лә динһеҙлектән бит. Алланан ҡурҡҡан ил башлығы икенсе илгә баҫып инеп, байлығын таларға, халҡын ҡырҙыртырға, етмәһә, шуны демократия индереү, тип күрәләтә алдап маташырға йөрьәт итмәҫ ине. Бөгөн юғары белемле, ғилемле, дәрәжәле кешеләр дингә килә. Фән нигеҙендә килә. Миңә Татарстан Президенты Миңтимер Шәймиевтың “Российская Федерация сегодня” (2006, №2) тигән журналға биргән интервьюһы оҡшаны. “Кеше күберәк белгән һайын, тикшереп ҡарай алмаҫ, фән сиктәрендә аңлатып булмаҫ нәмәләргә юлыға тора. Йәш саҡтан математика менән мауыҡтым, ә унда, белеүегеҙсә, сикһеҙлек тигән төшөнсә бар. Ике тарафҡа йүнәлгән сикһеҙлек, һандар сикһеҙ вағая, әммә нолгә етә алмай. Ҙур һандар тарафында ла шулай — осо юҡ. Быны нисек аңлатырға, күҙ алдына килтерергә? Донъяла бер ғилем менән дә аңлата алмаҫ нәмәләр күп һәм шул уҡ ваҡытта уның нисек камил көйләнгәнен күрәһең. Юғары Аң, Ижадсыһыҙ шулай булыуы мөмкинме?” — тигән ул. Республикабыҙҙың Президенты Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимов республикабыҙҙағы дин әһелдәренә, динле граждандарға иғтибарлы, кеселекле булыуы менән айырылып тора. Назараттарҙы, дини уҡыу йорттарын, ғибәҙәтханаларҙы үҙе ҡарап сығып, кәңәштәрен дә бирә, ярҙам да күрһәтә, етешһеҙлектәрен дә иғтибарһыҙ ҡалдырмай. С.Юлаев проспектында төҙөләсәк мөһабәт мәсет проектын тап ул хуплап сыҡты һәм ярҙам ҡулы һуҙҙы. Шундай етәкселәр булған ерҙә выждан ирке тураһындағы закондар дөрөҫ үтәлә, ғәмәлгә ашырыла.

**Ғаилә — Аллаһ биргән ниғмәт һәм бурыс**

Халҡыбыҙҙа совет осоронда дәһрилек хаттин дәрәжәлә көсәйгән осорҙа ла ижап уҡытып никахлашыу бөткәне булманы. Шул ғәмәл үтәлмәһә, бала тыумаға бәрәбәр, етмәһә, зәғиф булып тыуыуы ихтимал, тип, йәштәрҙе шым-шым ғына өгөтләй торғайнылар беҙҙең яҡта, йәғни инйәрҡатайҙарҙа. Аҙ-маҙ ғына булһа ла сүрә уҡырлыҡ ир-ат ҡалмағас, дингә

бер аҙ хилафлыҡ булһа ла, ижап уҡырға әбейҙәрҙе саҡыралар ине. Ғаилә ныҡлығы, уның бәхете оло ижтиһадтар, тырышлыҡ талап итә. Борон ғаиләләр ныҡ булған, күпме ҡайғы-хәсрәт күрһә лә, тарҡалып бармаған. Хәйер, уҙған быуаттың етмешенсе йылдарына тиклем, ҡанға һеңгән дини, милли ғәҙәт буйынса, башҡорттар ғаилә кризисы тигән нәмәгә артыҡ бирешеп бармай ине әле. Ғаиләне Хаҡ Тәғәләбеҙ ышанып тапшырған аманат тип таныған ға, уның алдында һәр ике яҡ иҫ киткес яуаплылыҡ тойған, сабыр итә, һаҡлай белгән, нәсихәттәргә ҡолаҡ һалған.

**Баланың бәхете атаһы умырткаһында ярала**

Шулай тип өйрәтә динебеҙ. Тимәк, атай алдында балаһына йән биреү генә түгел, уны бәхетле итеү бурысы ла тора. Һәр ғәмәлебеҙ Аллаһ исеменән башланырға тейеш. Балаға ғүмер бүләк итеү ғәмәле лә шулай уҡ. Шайтан ҡатнашмаһын өсөн. Никах та уҡытылмаған, шайтан ҡатнашлығында яралған, бисмиллаһыҙ, хәрәм ризыҡтар ашаған, араҡыһын да эскән, тәмәкеһен дә тартҡан ата-әсәнән донъяға килгән баланан ни көтөргә мөмкин? Хәҙерге балалар тыңлауһыҙ, тип әйтергә яратабыҙ. Ярай әле шундай шарттарҙа ла, Хаҡ Тәғәлә рәхмәте менән, күңелдәрен саф тотҡандары ла бар. Бала табыу йортонда ятҡанда сабыйға йылдар буйы ниндәй генә һөт имеҙмәнеләр. Ә бит Исламда һөт инәһенең, һөттәштәрҙең хаҡы ҙур, улар үҙ-ара өйләнешергә лә тейеш түгел. Беҙ быны белдекме ни? Ниндәй генә әсә һөтө ауыҙландырылмаған беҙҙең сабыйҙарға. Милләтебеҙҙең фиғеле шул рәүешле лә боҙолдо, беҙгә хас булмаған һыҙаттар килеп инде.

**Бар ул теге донъя**

Мөшриктәр (мәжүсиҙәр) Рәсүлуллабыҙҙан мөғжизә таптырып бер иткән. Быға яуап итеп Аллаһы Тәғәлә гонаһтары өсөн ер йөҙөнән юғалған халыҡтарҙы миҫалға килтерә. Мөғжизә күрһәтелеп торһа ла, ышанмағандар улар. Үҙеңә ҡара, тәнеңдә күпме мөғжизә, тиелгән Ҡөрьәндә. Ысынлап та, беҙ һәр беребеҙ бер бөтөн хасил итһәк тә, ҡасандыр ике өлөш булғанбыҙ — атайыбыҙ һәм әсәйебеҙ тәнендә йөрөгәнбеҙ. Ул сағыбыҙҙы беҙ хәтерләмәйбеҙ — әммә булғанбыҙ бит! Унан әсәбеҙ йөрәге аҫтында 9 айға яҡын ғүмер кисергәнбеҙ. Әгәр шунда оҙаҡҡа ҡала торған булһаҡ, беҙ икенсе донъя барлығын белмәҫ тә инек. Ер йөҙөндә ғүмер кисереп, донъя менән хушлашҡас, йәнә икегә бүленәсәкбеҙ: тәнебеҙ ерҙә ҡаласаҡ, йәнебеҙ Хаҡ Тәғәлә хөкөмөнә күсәсәк. Икенән бер булыу, берҙән ике булыу мөғжизәһенә нисек ышанмаҫҡа мөмкин? Бер мөшрик сереп бөткән кеше һөйәге тотоп, Рәсүлуллабыҙ янына килгән дә: ”Һин ошо серек һөйәк яңынан кешегә әүерелер тиһеңме?” — тип шик белдергән. ”Әҙәмде юҡтан бар иткән Аллаһы Тәғәләгә һөйәктән яңынан терелтеү бер ни тормай”, — тип яуаплаған пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт ғәләйһи үә сәлләм. Күҙгә күренмәҫ һәр күҙәнәгебеҙ кеше хаҡында бар нәмәне белә, шуға ла унан клон яһарға мөмкин. Кешенең ҡоймосонда бер ниндәй шарттарҙа ла юҡҡа сыҡмай торған бер күҙәнәк барлығын ғалимдар иҫбатланы инде. Шул күҙәнәктән тереләсәкбеҙ беҙ Ҡиәмәт көнөндә.

**Ышанмаһаң — уйлан**

Дәһри менән диндар бәхәскә инәләр. Тәүгеһе, үләбеҙ ҙә, сереп, ер булабыҙ, юҡ ул теге донъя, ти. Диндар: "Ярай, һинеңсә булһын. Әгәр һин хаҡлы икән — икебеҙ ҙә отабыҙ. Әммә хаҡһыҙ икәнһең, мин генә отам, ә һин мәңге тамуҡта ҡаласаҡһың", — ти.

Дәһрилеккә инеп китә яҙһам да, Алланың барлығын тойоу мине ҡалдырғаны булманы. Тойомлаһам да, өйрәтеүсеһе, тейешле шарттары булмағас, дингә ярашлы йәшәй белмәнем. Нисә тапҡыр үҙемде әсәлек бәхетенән мәхрүм иттем. Бынан үҙем тетрәнә инем. Хатта яза һорап алдым, буғай — аварияға эләктем. Ул саҡта гонаһтар өсөн яза аша ғына таҙарынаһыңдыр, тип уйлай инем. Баҡһаң, Аллаһы Тәғәләнең рәхим-шәфҡәте шул тиклем киң, кеше ихлас тәүбәләре, игелекле эштәре, тулы иманға килеүе, ихлас ғибәҙәттәре менән дә ярлыҡаныуы мөмкин.

## Ҡаза бирер булһа...

Яҙмаларымда телгә алынған ваҡиғаларҙы, кешеләрҙе ғәйепләр өсөн түгел, ғибрәт өсөн иҫкә төшөрәм — үҙем дә әҙәми зат ҡынамын бит, фәрештә түгелмен. Шуға ла геройҙарым исемһеҙ.

Бер мәл миңә хөкөм барышында тәржемәсе сифатында ҡатнашырға тура килде. Бер ҡатын ҡәйнәһен туҡмап үлтергән дә, урыҫса һөйләшә алмайым, тип тылмас һораған. Башта прокуратурала тәфтишселәр тикшереүендә булыуымды һоранылар.

Шундай ауыр гонаһ ҡылған кешене яҡындан тәүгегә күреүем ине — ишектән кәүҙәһе шәйләнеүгә үк тәндәрем сымырҙап китте. Ҡарап тороуға енәйәтсегә лә оҡшамаған — йөҙөндә лә, күҙендә лә йырт-ҡыслыҡ юҡ, ҡалын ирендәре ҡымтылған, ҡара эшкә күнеккән ҡулдары кофта итәген бөтөрөкләп-бөтөрөкләй — ҡәҙимге ауыл ҡатыны инде.

Тәфтишселәрҙең әйткәнен мөмкин тиклем ябайыраҡ итеп тәржемәләйем, йәнә ҡабатлайым — ул ҡапыл ғына яуап бирә алмай, һораулы ҡарашын берсә уларға, берсә миңә ташлай. Сит яҡтарҙа эшләгән, техучилище бөткән ҡатындың урыҫ телен белмәүе мөмкин түгел дә бит, ниндәйҙер әтнәкәһе барҙыр инде былай ҡыланыуының.

Енәйәтте башланғыс мәктәптә уҡып йөрөгән ҡыҙы ла күргән, унан да һөйләттеләр.

...Мискәлә әсеп ултырған балды ҡойғанда килен кеше өйҙәренә ниндәй фажиғәгә ҡур ҡуйғанын уйлап та ҡарамағандыр.

Таулы-урманлы был яҡтағы ауылдарҙа колхоз ерегеп китә алмаған, ирҙәрҙең дә күбеһе урман хужалығындағы миҙгелле эштәрҙә генә мәшғүл, ҡатындар ғүмер баҡый — йорт хужабикәһе. Бар даими килем — балалар пособиеһы ла ололарҙың пенсияһы.

— Ҡәйнәм ыҙалатты, — тип һөйләй башланы ҡатын. — Энәнең энәһен йәшереп, пальтоһының еңе эсенә сырмап ҡуя торғайны. Гел битәрләне, гел тамаҡты ҡыҫты. Ауырып түшәккә йығылғас та игәп ятты. Бал һарҡытып алып, эсә башлағайным: "Миңә лә ҡойоп бир", — тип һоранып ята, етмәһә. Эсемә йыйылып йөрөгәндер инде, асыуым килеп һуҡтым-һуктым да ебәрҙем. Баш шаулап китте, аҙаҡ күпме туҡмағанымды үҙем дә белмәйем...

Төпкө яҡта бәләкәс туғанын бәүетеп ултырған ҡыҙы тауышты ишетеп килеп сыға, әсәһен тыйып ҡарай, әммә унышы ишетер-күрер хәлдән уҙған була. Сүмесләп бал эсә лә ҡарт ҡатынды дөмбәҫләй, эсә лә дөмбәҫләй. Уның:

— Етер инде, үлтерәһең бит, — тип инәлеүе оторо ҡыҙҙырып ебәрә киленен.

Әбейҙең өнө-тыны юғалғас ҡына, аңы асылып китеп, ни эшләгәнен аңлар хәлгә килә ҡатын. Кеше үлтергәненә һаман да ышана алмай.

Ире иртәнсәк үк ниндәйҙер эш менән сығып киткәнлектән, берҙәнбер шаһит әлеге ҡыҙы була. Бала ғәжәп битараф төҫ менән, тыныс ҡына итеп булған хәлде бәйән итә, әсәһенә йәлләп ҡарай. Һорау алыу тамамланғас, беркетмәне әҙерләгән арала ҡатынға:

— Нисек шундай эшкә ҡулың барҙы һуң? — тип һорау бирҙем.

— Үҙем дә белмәйем. Әйтәләр бит, ҡаза бирер булһа, башыңдағы аҡылыңды алыр, тип.

Үҙ-үҙенә хайран булып, аптырап ҡулын йәйҙе ҡатын.

Ҡазамы, язамы... Әле шул ваҡиғаны иҫләгәндә әбейҙең (!) бал һорағаны хәтергә төшә лә: "Йә Хоҙай!" — тип ҡуям. Үлем һорауы ла шул булған даһа...

Иҫерткестең тамсыһы ла хәрәм, тип өйрәтә динебеҙ. Был ҡатын да нисәлер йәшендә биҙрәләп түгел, йотомлап ҡына тәмләй башлағандыр эсемлекте, фажиғәле көнгә ҡәҙәр самалап эсеүселәр рәтендә йөрөгән. Әммә бер мәл сиктән үткән дә, айныҡ сағында башына ла килмәҫ вәхшилек ҡылған. Саманы белеп эсеү мәҙәниәте тигән һүҙ — буш һүҙ ул, сөнки ҡасан да булһа кеше үлсәмде юғалта. Халҡыбыҙҙа айныҡлыҡ мәҙәниәте генә йәшәүгә хаҡлы.

## Тынғылыҡ тапмаған йәндәр

Мәскәүгә бер нисә тапҡыр юл төшөп, тәү барғанда хатта айға яҡын курста уҡып ятһам да, ниңәлер Ленин мавзолейына инергә аяғым тартманы. Ҡыҙыл майҙанды иңле-буйлы урап сыҡҡас, диуар буйы зыяратҡа әүерелгән Кремль янына йыйылған халыҡ эргәһенән уҙғанда ла "өйөр инстинкты" уянманы. Үҙем дә ғәжәп итәм быға, сөнки ул саҡта Ленинға инанысым, ололауым көслө ине әле. Хәйер, әле лә уның тарихтағы әһәмиәтенә баһам юғары. Илле биш томлыҡ әҫәрҙәре араһындағы егерме-утыҙ йәшлек кенә сағында яҙылған күләмле, киң ҡарашлы, бай телле мәҡәләләрен уҡып һоҡлана инем.

Тарихта осраҡлылыҡ юҡ, кемдер замананы икенсе ағышҡа бороп ебәрергә тейеш икән, тәғәйен кешеһе табылмай ҡалмаҫ. Аллаһы Хаҡ Тәғәлә бар донъяға дәһри дәүләттең ниндәй булырын ғибрәт итеп күрһәтер өсөн беҙҙең илде һайлаған икән, Ленин кеүек берәү барыбер ҡалҡыр ине.

Күпме тырышлыҡ, ил менән ил өсөн тип бол йыйыу, ҡаһарман хеҙмәт, ҡан ҡойоу! Тик Аллаға урын булмаған дәүләттә, уның ризалығын алмаған илдә, барыһы ла томан кеүек таралырға ғына тора ине бит. Үҙгәреш елдәре сыҡты ла томанды таратты.

Коммунистар Лениндан Алла ла, пәйғәмбәр ҙә яһарға тырышты. Биографияһын нисек өйрәттеләр һуң — имеш, сабый сағынан һис гонаһ

ҡылмаған, камил бер шәхес булған. Тел тейҙертмәнеләр. Аҙым һайын икона урынына портреттары эленеп торҙо. Үҙенеке генә түгел: Маркс, Энгельс, политбюро ағзалары... Ана шул була инде ул Аллаға тиң — ширк тотоу. Әҙәми затҡа табындыҡ, унан Алла яһаныҡ һәм Алланың асыуын алдыҡ.

Һуңғы йылдарҙа Ленин мәйетен ерләү тураһында әленән-әле бәхәс ҡуба тора. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, был мәсьәләне сәйәсәткә әүерелдерәләр ҙә, серек кәүҙә урынында ҡала бирә. Ә кешесә генә уйлағанда, ул бахырға күптән инде ер ҡуйынына ҡайтып, тынyслыҡ табырға ваҡыт. Ә бәлки, дәһрилеге өсөн Алланың шул рәүешле уға яза биреүелер...

Ниңә яза тим һуң?

Йыл самаһы элек һоҡланғыс яҙмышлы, инде хаҡлы ялға сыҡҡан абруйлы бер табибә апай менән осраштырҙы мине яҙмыш. Тормош юлдашы ла ғүмере буйы кешеләрҙе дауалап, игелеге менән хәтерҙәрҙә яҡты эҙ ҡалдырған.

Апай медицинаға юлын Мәскәүҙә башлаған. Һуғыштан һуңғы осорҙа фәҡирлек былай-алаймы көслө ине, ә уның тап бына баш ҡалабыҙҙа белем алғыһы килгән. Дөрөҫөрәге, миҙал менән мәктәп тамамлаған ҡыҙҙы республикабыҙҙан юллама менән ебәргәндәр. Итәк тулы бала менән яңғыҙ ҡалған әсәһе ҡыҙына аҡсалата ярҙам күрһәтә алмай, ә институттың ятағы юҡ. Ҡабул итеү имтихандарын уңышлы тапшырған ҡыҙ, фатирға инерлек тә аҡсаһы булмағанлыҡтан, төн үткәрер өсөн метроға инеп ҡала башлай. Күрһәләр, ҡыуалар. Урындыҡтар аҫтына йәшенеп кенә инеп ята ла, электровоздар йөрөгән шахтаның төндәр буйы олоуынан аҙға ғына онотолоп китә, уяулы-йоҡоло көйө таңда институтына ашыға.

Әммә яҡшы өлгәшә ҡыҙ. Шуның өсөн дә, институттың етәкселеге уның хәлен белеп ҡалғас, ректорҙың кабинетында төнгөлөккә ҡалырға рөхсәт бирәләр.

— Әммә былай ҙа йәпһеҙ булып сыҡты, ректор килеүгә таң менән тороп, йыуынып, йыйынып сығып китергә тейеш инем, — тип, әрнеү аша көлөмһөрәңкерәй апай.

Тартынсаҡ, ипле, әммә ныҡышмал ҡыҙҙы йәлләп, ректор уға анатомия лабораторияһында ярты ставкаға йыйыштырыусы булырға һәм Зина исемле апай менән шундағы бер бүлмәлә йәшәргә кәңәш итә.

”Ебәргән урындарында мәйетте хәтерләткән балауыҙ йөҙлө ҡотһоҙ ҡатын ҡаршы алды, — апай хәтирәләрен һағышҡа, үҙ-үҙен йәлләүгә ҡормай ғына, әммә хисле итеп теҙә лә теҙә. Көлөп тә ебәрә хатта. — Лабораторияны икәүләп йыуып, таҙартып сыҡтыҡ. Мәйеттәр ятҡан формалинлы ванналар ауыр мәрмәр таҡталар менән ҡапланған. Аҫҡуймаларҙа — кәүҙәләрен институтҡа васыят итеп ҡалдырған кешеләрҙең һөлдәләре. Ҡот осмалы, әммә медик булырға әҙерләнгәс, быларына үҙемде күнектерергә тейешмен, тип үҙемде ҡулда ныҡ тоттом.

Зина апай йәшәгән мөйөш лаборатория залында таҡта менән генә бүленгән. Йоҡларға яттыҡ. Апай миңә теге таҡта стена буйында урын күрһәтте. Нисәмә көндәр йүнләп йоҡо туйғаны юҡ, шунда уҡ әүен баҙарына киткәнмен.

Әммә төн уртаһында лаборатория яғынан килгән сәйер тауыштарҙан уянып киттем. Ванна өҫтөндәге ауыр таҡталар дығырлап шыуғаны

ишетелә, һөйәк шаҡылдағандай — кемдәрҙер йөрөй. Һүҙҙәре аңлашылмаһа ла, тоноҡ ҡына тауыш менән талашҡандайҙар. Дөмбәçләшәләр ҙә кеүек.

Ҡурҡышымдан Зина апайҙың түшәгенә сумғанымды һиҙмәй ҙә ҡалдым.

— Апай, йөрөйҙәр бит, — тим һаҡ ҡына бышылдап.

— Йөрөйҙәр инде, — ти битараф ҡына.

Ул арала теге яҡтан тотҡаны ҡайыра башланылар, ишек уйнап тора. Йәнем алҡымыма килде.

— Апай, хәҙер килеп инһәләр?!

— Тотҡаны нығыттырырға кәрәк, ҡасандан әйтәм инде. Хәҙер нисә алыштырҙыҡ, ишек тә ҡаҡшап бөттө.

— Апай, быларҙың шулай йөрөүен етәкселәр беләме һуң? — тием, тешем тешкә теймәç хәлгә етеп.

— Беләлә-ә-әр. Тик ни эшләтә алһындар инде".

...Икенсе көнөнә үк нығышып документтарын ала ла, тыуған Өфөһөнә ҡайта ҡыҙ. Ошонда институт тамамлай, ифрат мәғлүмәтле, кешелекле табибә булып танылa. Ә теге хәлде беҙ осрашҡан көнгәсә кешегә һөйләмәй. Рәсми медицинала, дәһри дәүләттә быны дөрөç аңлаусы табылмаç ине, моғайын.

— Шул ғибрәтле төндән мин теге донъя барлығын беләм, ҡыҙҙар, — тип тамамланы ул һүҙен.

...Апайҙың хикәйәтенән һуң бер уй башымдан китмәй — һикһән йылдан ашыу тәне ер ҡуйынына тапшырылмаған дәһри дәүләт башлығының йәне ҡайҙарҙа, ни кисереп аҙашып йөрөйҙәр, бер Аллаһ ҡына белә.

## Тәбиғәт — Алланың аманаты

"Алланы ниңә шул тиклем маҡтарға кәрәк һуң?" тип һорағайны бер саҡ таныш апай. Аллаһы Хаҡ Тәғәлә беҙҙең маҡтауҙарға мохтаж түгел, был мәҙхиәләр үҙебеҙ өсөн, ул биргән икһеҙ-сикһеҙ мәрхәмәттәрҙең ҡәҙерен белергә өйрәнеүебеҙ өсөн кәрәк. Һауаның составы, һыуҙың молекулаһы аҙ ғына үҙгәрһә, еребеҙ үҙ орбитаһын һанламай башлаһа, ямғырҙар еребеҙҙе һуғармаһа, ҡояштың температураһы артһа йә кәмеһә.... һанап та бөтөргөһөҙ шундай шарттар саҡ ҡына икенселәнһә лә, кешелек йәшәүҙән туҡтар ине.

Мохтаж сағыбыҙҙа бәрәүҙән йылы һүҙ ишеткәнгә лә ҡыуанабыҙ, матди, мәғәнәүи ярҙамдары булғандарға, тәрбиәбеҙ етһә, үҙебеҙҙе ғүмергә бурыслы һанайбыҙ. Иç киткес тәбиғәттә беҙгә ғүмер бүләк иткән, ризыҡландырған, секунд һайын янаған хәүеф-хәтәрҙән күренмәй генә һаҡлап торған, аң етмәç шәфҡәт-шәфәғәтен йәлләмәгән Олуғ Көскә рәхмәттәр әйтергә ниңә телебеҙҙе йәлләйбеҙ һуң?

Урмандарына сыҡһаң, еләк-емеш, кейек-ҡош; йылғаларына төшһәң, сихәтләндерер һыуы, балығы; ҡырҙарына сыҡһаң, йәйрәп ятҡан игендәре, көтөү-көтөү малдары, ерҙең аçты-өçтө хазина, алтын-көмөш — һанап та бөтөрмәле түгел Хаҡ Тәғәлә биргән ниғмәттәрҙе. Зиһенең, егәрең етеп, тәрбиәләп ал ғына. Әммә шул аманаттарға хыянат итмәй, һаҡлай ҙа бел. Был да — Хакимыбыҙға мәҙхиә.

Башҡортостаныбыҙҙың ҡайһы районына килмә, мотлаҡ бер генә булһа ла шифалы һыу, ләм сығанағы барлығын әйтерҙәр. Үҙемдең тыуған Белорет районында ғына ла зәңгәр балсыҡ ятҡылыҡтары бар. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бер ятҡылығын Екатеринбургтыҡылар ташып, урынында соҡор ғына ятып ҡалған. Ә данлы Асы һыуы! Әле юл да, элемтә лә, хатта электр уты ла юҡ замандарҙа йәйәүләп тә, һыбайлап та, хатта һал менән дә ер аяғы — ер башы яҡтарҙан килеп етерҙәр ине. Мәскәү, Ленинград, хатта Алыҫ Көнсығыштан... Ҡайҙан белгәндәр тиһең! Әле килеп Асының да шифалы ләмен ситкә алып китеп бөткәндәрен ишетеп йәнем әрнене. Ярай әле шишмәне машинаға тейәп булмай.

Шифалы сығанаҡ менән бәйле ғибрәтле бер ваҡиғаны туғаныбыҙ Заһиҙа апайҙан ишеттем. Ул бик оҙаҡ Ҡаҙағстанда, Алматынан алыҫ та түгел Талғар ҡалаһында йәшәне.

Тормош иптәше Йәнтимер еҙнә тәләкәсе, сырхаңҡырап торһаң:

— Ана, апайығыҙ ҡытай табибы менән эшләгән, һорағыҙ үҙенән берәй көнсығыш сараһын, — тип эләктереп тә алыр ине.

Заһиҙа апай — иҫ китмәле алсаҡ, шәфҡәтле, йөҙөнән мәрхәмәт һәм тыныслыҡ бөркөлөп торған нурлы ҡатын. Йомшаҡ ҡына кеткелдәп көлә:

— Минән бигерәк һин ярҙамсы булдың даһа, күберәк беләһеңдер.

...Советтар Союзы юҡҡа сыҡҡас, рәсми медицина ҡот осҡос ауыр шарттарға ҡалған мәлдә, Рәсәйҙе солғап алған экстрасенс, халыҡ табиплығы, сихыр-михыр шауҡымы башҡа республикаларҙа ла ҡырағайҙарса таралып киткән. Ҡаҙағстанда ҡытай имселеге ҡеүәтләнгән.

Талғарға ҡайҙандыр шундай бер табип килеп сыҡҡан. Атаһы ҡытай милләтле, әсәһе татар был әҙәм ниндәйҙер контораны арендаға алып, шәхси дауахана рәүешенә индергән. Файҙаһы тейгәнме-юҡмы, даны тарала тегенең. Бина эсендә урын етмәй башлағас, Заһиҙа апайҙарҙың кетәгендә ванна ҡуйырға рөхсәт һорап инә, ярҙамдары өсөн түләргә лә вәғәҙә итә.

Әллә ҡайҙарҙан сәләмәтлеккә туйына алмай килгән юлаусылар былай ҙа Заһиҙа апайҙарға ҡунып сығыр урын һорап килгәндәрендә, йәлләп, сауап булыр, тип, хәлдәренсә ҡабул итәләр. Сират еткәнде көтөп, бер нисә көн йәшәп тә киткеләйҙәр. Кешенең яфаланғанын белгәнгә, ярҙам итергә ризалаша улар.

— Һин һөйлә әле нимә менән дауаланығыҙ ул ҡытай менән, — тип йәнә кәжекләй еҙнә. Үҙе рәхәтләнеп көлә.

Апай уға үпкәләмәй, кеткелдәп көлөп ала:

— Ваннаға тауыҡ тиҙәге һалдырып, өҫтөнә ҡайнар һыу ҡойҙорта теге. Ул еҫе! Түҙерлек түгел, ауырыу меҫкендәр нисек сыҙап ятҡандарҙыр. Әйтеп ҡарағыланым бахырҙарға ни менән дауалағанын. Аптыраған өйрәк арты менән һыуға сумған, тиҙәр бит. Ҡытай медицинаһына ышаныуҙары шул хәтлем көслө булғандыр инде, берәү ҙә баш тартманы.

— Үәт-үәт, кеше "ҡытай медицинаһы" ти ҙә иҫе китә, ә бит шыр наҙан, шарлатан булған ул бәндә, — ти, инде бик етди төҫ менән еҙнә.

— Аҡсаны күрәне генә инде ул, тик аҙаҡ ҡасып китте, — апай көрһөнөп ҡуя. — Тауыҡ тиҙәге ваннаһынан һуң бер ҡатын, өйөнә ҡайтып етмәй, үлеп ятҡан. Ишетеү менән һыҙған теге "табип".

Намыҫһыҙ юл менән, хатта кеше ғүмере иҫәбенә кеҫә ҡалынайтыусылар осоро булды үҙгәртеп ҡороу тигән йылдар. Ә бит һәр әҙәм, мосолманмы ул, түгелме, Хаҡ Тәғәлә алдына баҫасаҡ, яуап тотасаҡ. Сөнки Ул — бер, ул ярaлтыусы, мәңгелек донъяға күсереүсе һәм яза биреүсе лә. Динһеҙҙәр гонаһы өсөн ике тапҡыр яза алырҙар — был донъяла һәм ахирәттә, тиелә хәҙистәрҙә. Ташлап ҡасҡан малы, йәшенеп йөрөргә мәжбүр булыуы һәм бер саҡ барыбер тотоласағы, тотолмаһа, дер ҡалтырап көн күрәсәге — фанилыҡта уҡ күргән яза түгелме ни?!

Һүҙҙе шифалы сығанаҡтан башлағайным бит әле. Талғарҙан йыраҡ түгел ҡышын туңмаҫ, йәйен йылынмаҫ, тешкә үтерлек һалҡын шишмә сығып ятҡан. Сихәтле көсөнөң даны Ҡаҙағстандан ситкә лә таралған, шуға янынан кеше өҙөлмәгән. Соҡор яһап сумаһың да, теүәл бер минут сыҙап ултыра алһаң, сәләмәтләнеп килеп сығаһың, тиҙәр һынаған кешеләр. Зәһиҙә апай ангинаһын шулай бөтөргән.

Аяҡ-ҡулы һыҙлау, эске ағзалары сирле кешеләр ҙә дауа тапҡан бында. Арзан бит — киләһең дә, Аллаһы Тәғәлә үҙе бүләк иткән мөғжизәле һыуға төшөп кенә һауығаһың да ҡайтаһың. Инфляцияның ҡоторған мәлендә иң изге, мәрхәмәтле урынға әйләнә сығанаҡ.

Үҙгәртеп ҡороу, баҙар иҡтисады тигән нәмә шишмәнең яҙмышына ла йоғонто яһар, тип кем уйлаған. Берҙән-бер көндө сығанаҡ янын кәртәләп алалар, ниндәйҙер бай "фирмач"тың шифахана төҙөйәсәген белдерәләр ҙә, ауырыуҙарҙы индермәҫ булалар. Бина төҙөлә, ванналар ҡуйыла, ҡыҫҡаһы, шартына килтерәләр.

Шифахана асылыр көн дә етә. Әммә... Шар асылған крандарҙан һыу аҡмай ҙа ҡуя. Монтажлағанда хата киткәндер, тип тикшереп тә ҡарайҙар, ер аҫтында ла һыу юғалғанын асыҡлайҙар. Өс-дүрт көндән утыҙ-ҡырҡ саҡырым ситтәрәк урғылып сыға теге шишмә. "Алланың кешеләргә бушлай биргән ниғмәтен үҙ файҙаһына тотонорға уйлағанға яза алды "фирмач", — тигән ҡаҙаҡтар.

...Хаҡ Тәғәлә мөғжизә күрһәтә тора, бәндәләр фәһем алмай. Ахирәттә, Аллаһ хозурына барып баҫҡас, динһеҙҙәр әҙгә генә ергә кире ҡайтарыуҙы һорарҙар, беҙ инде башҡаса йәшәр инек, тиерҙәр. Тик уларға, тере сағығыҙҙа әҙ күрһәтелдеме һеҙгә мөғжизә, һеҙ бит һанламанығыҙ, тиелер. Кире ҡайтарылһағыҙ ҙа шулай буласаҡ, сөнки һеҙҙең асылығыҙ шундай.

Һайлау хоҡуғы биргән Йәнәбе Хаҡ хәләлде, хәрәмде беҙгә асыҡ итеп еткергән. Шуға ярашлы йәшәргә насип ҡыл, Раббым, тип, биргәндәренә мәҙхиә ҡылып ғүмер кисерергә яҙһын һәммәбеҙгә.

## Һәр ҡоштоң үҙ ҡауырыйы

2002 йыл ине булһа кәрәк, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайынан шылтыратып, Яр Саллыға барыуымды, Татар милли мәжлесе (Конгресы) әҙерләгән ниндәйҙер мөрәжәғәткә ҡул ҡуйып ҡайтыуымды һоранылар. Ултырышҡа Рәсәйҙәге башҡа милли субъекттарҙан килеүселәр ҙә бар ине. Ҡәрҙәштәр тараҡан ҡағыҙҙарҙа фин-уғыр, төрки халыҡтар дуҫлығы, берләшергә тейешлеге хаҡында матур һүҙҙәр

сыбарлана. Ғәҙел һүҙҙәр. Әммә ҡул ҡуйыуҙан баш тарттым. ”Ҡол ителгән халыҡтар” (порабощенные народы) тигән һүҙҙәр йөрәгемә уҡ булып ҡаҙалды.

— Башҡорттар ҡол ителмәгән, беҙ үҙ теләгебеҙ менән ингәнбеҙ Рәсәй дәүләтенә, — тинем дә, ошо һүҙҙәр алып ташланған хәлдә генә ҡултамғамды һаласағымды белдерҙем. Ҡаты ҡыҫымға эләкһәм дә, һүҙемдән ҡайтманым:

— Был минең халҡым һайлаған юл, тарих, уны үҙгәртеп күрһәтеү вәкәләте биргәндәре юҡ миңә.

Дөрөҫөн әйткәндә, кемгәлер ҡол ителһәк тә, ҡол тип танымаҫ инем мин халҡымды... Беҙ — Алланың ғына ҡоло.

Янымда ултырған яҡут ғалимәһе Лена Валерьевна Федорова иһә бәхәсләшеп торманы, үҙҙәренең милли ойошмаһы ниндәй ҡарар ҡабул ителһә лә ризалашырға ҡушыуын әйтте лә, ҡул ҡуйҙы.

Мөрәжәғәттәрҙе Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайында күрһәтеп, кәңәшләшербеҙ ҙә, яуап бирербеҙ, тип һалып алдым. Алғараҡ китеп әйтәйем — хупламаны уларҙы ҡоролтай ҙа.

Лена менән һөйләшеп киттек. Ул этнограф икән, беҙҙең байтаҡ ғалимдарыбыҙ менән таныш булып сыҡты. Алтайҙа, Тибетта төшөрөлгән өй дәүмәллек тамғалы таштарҙың фотоларын килтереп сығарҙы ла:

— Башҡорттар, нишләп йоҡлап ятаһығыҙ, бына ҡара әле, һеҙҙең ырыу тамғалары бит, ә уларҙы ламалар ғибәҙәтханаларына күтәрмә итеп һалып бөтөп баралар, — тип, бик хисләнеп аңлатмалар бирә башланы. — Рәил Кузеевтың китабында ошо тамғалар тотош бар. Бына Кузеевтың үҙенең ырыу тамғаһы.

Төркиҙәргә хас булғанса, туғанлыҡ ептәрен барларға ла өлгөрҙөк.

— Яҡут тип урыҫтар биргән беҙгә исемде, “һаһа” тип әйтә белмәгәндәр ҙә. Хәҙер Саха тип ҡушып яҙабыҙ шуға күрә. Ә затыбыҙ монгол егетенә бирелгән төрки килендән киткән. Бәлки, башҡорт булғандыр, тигән фараздар ҙа бар. Һеҙҙә лә бар бит монгол ҡаны, ҡанбабаларыбыҙҙан баш тартмайыҡ. Улар бөйөк милләт булған.

Оҡшаттым мин Ленаны киң ҡарашлы, мәғлүмәтле булғаны, халҡыбыҙҙы эҫе күргәне өсөн. Ана бит, нисек борсолоп, тамғалы таштарыбыҙҙы ҡыҙғанып торған була. Ҡултамға йәһәтенән фекерҙәр тап килмәһә лә, һағышланып хушлаштыҡ.

— Тыңла әле, Гүзәл, минеңсә, беҙҙең милләттәр атамаһы фиғелебеҙгә ярашлы ҡушаматтан килә, — тине ул, бер аҙ һөйләшеп ултыра торғас. — Ара-ара, зат-зат бүленә торғас, иң ишлеләренеке милләт исеменә әүерелгән дә ҡуйған. ”Нуғай” һүҙенең ни аңлатҡанын һеҙ хәҙер онотҡанһығыҙ, яҡутта ғына һаҡланған ул — тиҫкәре тигәнде аңлата.

Әйтәһе түгел, беҙ, төркиҙәрҙең, киреләнһә, алдына сығыр зат булмаҫ. Ғорурлыҡ менән тәкәбберлекте бутауҙан киләлер был сифатыбыҙ.

Тормошта осраҡлы нәмәләр юҡ, тигән фекер дөрөҫтөр. Нисәмә йылдар үткәс, Мәскәүҙә йәнә юлдарыбыҙ киҫеште — 2005 йылдың декабрендә Милләттәр йорто менән берлектә үткәргән ”Ғаилә институтын һаҡлауҙа милли традицияларҙың әһәмиәте” тип аталған фәнни-ғәмәли конференцияға ул да килгәйне. Рәсәйҙең баш ҡала-

һында ”Төбәк-ара төрки телле халыҡтарҙың милли традицияларын тергеҙеү һәм үҫтереү фонды” тип аталған ойошма байтаҡ йылдар инде БДБ илдәрендәге ҡатын-ҡыҙҙарҙы осраштырып, берлектә төрлө саралар уҙғарып тора. Фонд уҙғарған әлеге конференцияла Лена арҡаҙаштары менән яҡут (һаха) кәләштәрен туйға кейендереү йолаһын күрһәтте, ул хәҙер алмаслы биҙәүестәр етештереүҙә лә ҡатнаша икән.

Һай, күркәм тамаша икән ул һаха кәләштәрен кейәү ҡуйынына әҙерләү! Иҫ киткес нәзәкәтле эске кейемдәр йоҡа ғына замшанан, көмөш биҙәүестәр хатта эске ыштанына ла тегелгән, һылыуҡайҙы тун өҫтөнән тунға бөркәйҙәр. Ҡат-ҡат кәбеҫтәләй итеп баҫтырып ҡуйғас, башына маңлайлыҡ, елкәлек һалдылар, ҡиммәтле тире башлыҡ кейҙерҙеләр һәм... замшанан тегелгән бала алъяпҡысы кеүегерәк бер нәмә килтереп сығарҙылар. Өҫкө өлөшөндә оҙонса дүрткел ике уйым да бар. Иорданияла күргән, һаҡал тип уйлаған битлек шунда уҡ иҫемә төштө, һаха килендәре лә йөҙҙәрен ете йыл буйына иренән башҡаға күрһәтергә тейеш булмаған икән!

Монголға кейәүгә бирелгән мосолман ҡыҙынан килгән ғәҙәт саҡтыһы булдымы был, аңлай алманым. Әммә милли кейемдәрҙең ҡатын-ҡыҙ матурлығын хазина күреп, яман күҙҙәрҙән ҡурсып тегелеүенә һәм йөҙҙө ҡаплап йөрөү беҙҙең диндә генә булмауына тағы бер инандым.

2006 йылдың 15—16 апрелендә VII Халыҡ-ара ”Этно-Эрато” тип аталған милли кейемдәрҙең юғары модаһы конкурсында Лена ла, Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары йәмғиәте вәкиле буларак, мин дә үҙ халҡыбыҙҙың кейемдәре менән ҡатнаштыҡ. Конкурс проектының авторы — ҡаҙаҡ ҡатыны Раушан Мусахан ҡыҙы Кәнәпйәнова. Ун илдән һәм Рәсәй субъекттарынан килтерелгән коллекциялар рәссам-модельерҙар, тегеүселәр күңеле, оҫталығы һалынған һоҡланғыс башҡарылышы менән арбаны һәм төп талапҡа — һәр милләттең асылын күрһәтеүгә ярашлы булды. Был кейемдәрҙе матурлыҡтан, зауыҡлылыҡтан тыш, йәнә бер нәмә берләштереүен абайларға мөмкин ине — тәүфиҡлылыҡ.

Конкурс биш номинация буйынса барҙы. Шәреҡ, кавказ, славян, төньяҡ халыҡтары кейемдәре һәм заман кейемендә этник мотивтар күрһәтелергә тейешле уҙыштар сәнғәт, мәҙәниәт, стилистика, тарих, дизайн, технология белгестәре тарафынан ифрат ентекле баһаланды. Әйткәндәй, улар илдә барған шундай конкурстарҙы күп күргән, еңеүсене билдәләгән.

Һәр ҡоштоң үҙ ҡауырыйы, кейемдәрҙә — халыҡ асылы. Башҡорт кейемдәренең авторы Бөтә Рәсәй музыкаль йәмғиәтенең Башҡортостан етештереү комбинатында рәссам-модельер булып эшләгән Наталья Анатольевна Степанова милләтебеҙ булмышын, кейенеү мәҙәниәтен бөтә тулылығында күрһәтә алған. Сәхнәгә Мәскәү ҡыҙҙарын кейендереп сығарғанда үҙҙәрен нисек тоторға ла ул өйрәтте:

— Башығыҙҙы текә тотоғоҙ, әммә күҙҙәр иҙәнгә төбәүле булырға тейеш. Бына шулай — ғорур, әммә оялсан.

Әлеге конкурста ҡатнашҡан бер халыҡтың да кейеме шәрә тән күрһәтеп, аҙғын хистәр уятыуға ҡоролмағайны. Мәскәүҙәр тамаша

ҡылдыртҡан заман кейемдәре коллекцияһы ғына ошо рәттән сығып, ҡыҙарырға мәжбүр итте — эске кейемдәр менән мәшәҡәтләнеп тормаған ҡыҙҙар-егеттәр алъяпма тип атарлыҡ сепрәк киҫәктәрен билбау менән генә тоттороп килеп сыҡҡас, жюри ағзалары күҙҙәрен ҡайҙа ҡуйырға белмәне. Иң түбән баһа алдылар был хаяһыҙҙар. Заман, заман тиһәк тә, экрандарҙан көн-төн порнография тип әйтерлек фильмдар аңды ағыулап торғанда ла халыҡтың күңел сафлығы, үҙ-үҙен һаҡлау инстинкты, тәүфиҡ тигәнең юғалып бөтмәгән әле. Хатта уяна, терелә бара кеүек тойола был сифаттар һуңғы ваҡытта.

Хаҡ Тәғәләбеҙ юҡҡа ғына һайлау хоҡуғы бирмәгәндер әҙәми затҡа — шаҡшының ни өсөн шаҡшы икәнлеген аңлар хәлгә етер өсөн дә йәмғиәттә боҙоҡлоҡ ваҡыты-ваҡыты менән көсәйеп торалыр. Бала ла йығылып, танауын ҡаната-ҡаната тура торорға, атларға өйрәнә. Ауыртынмаһа, абынмаҫҡа тырышмаҫ, ауырымаһа, иммунитеты барлыҡҡа килмәҫ ине. Йәмғиәт тә шулай — сирләй-сирләй һауыға.

## Ихата — ҡәберлек

Егерменсе быуат кешелектең яңы тарихында дәһрилектең иң ҡеүәтле сағы, хатта ошо инаныстың дәүләт сәйәсәте кимәленә күтәргән ил барлыҡҡа килеүе һәм һуңғы сиктә пыран-заран килтерелеүе менән онотолмаҫ һабаҡ биреүсе булып хәтерҙәрҙә ҡалыр.

Аллаһыҙлыҡ шул кимәлгә етте: ата — улды, инә ҡыҙҙы белмәҫкә әүерелде. Илдең тарҡалыуы шуға күрә лә иҫ киткес оятһыҙлыҡтар тыуҙырҙы, хаяһыҙлыҡ, уғрылыҡ, өҙгөслөк хаттин ашты.

Белорет ҡалаһының Выселка биҫтәһендә берәү эргәләге урыҫ зыяратының нигеҙе ҡаҡшап йығылған тимер ҡоймаларын төндә ташып ала ла, үҙ ихатаһын кәртәләй. Күршеләре танып, ”юҡ менән булаһың, ахыры хәйерле булмаҫ”, тип тә ҡарай, ыжлап та бирмәй ҡаруның. ”Зыяраттыҡы икәнен иҫбат итегеҙ тәүҙә”, — тип кенә ҡуя.

Күрше-күлән араһында һүҙ тарала шулай ҙа, тик бер кемдең дә уның менән бәйләнгеһе килмәй.

Бер нисә йылдан, уҙа китһә биш йыл булғандыр, иҫемә төшөп, ошо бәндә турһында Выселкалағы туғандарҙан һорай ҡуйҙым.

— Донъяла юҡ инде ул, — тинеләр. — Үҙе лә, өй эсендәгеләре лә, хатта ҡала үҙәгендә йәшәгән ҡустыһы ла бер-бер артлы вафат булды ла бөттөләр. Кешеләр был хәлде хужаның оңҡотлоғонан күрә. Ситтә йәшәгән нәҫелдәре килеп, өйөн һатырға маташып ҡарағайнылар, алыусы тапманылар. Тора шунда сереп, ҡәберлек ҡоймалары эсендә.

## Дәһри менән әңгәмә

Бынан байтаҡ йылдар әүәл, башҡорт халҡына тәңреселекте кире ҡайтарырға кәрәк, шулай итһәк, бөйөк милләт буласаҡбыҙ, тигән ауаздар көндән-көн ныҒыраҡ яңғырай башлаған мәлдә, ”Тишек ҡатаға табына башламабыҙмы?” тигән мәҡәлә яҙғайным. Ул ”Башҡортостан” гәзитендә 1998 йылдың 5 февралендә баҫылып сыҡты. Монголдарҙың ғибәҙәт-

ханаһында Будда һыны алдында ҡалдырылған ризыҡты ашарға ингән бер хәйерсенең тишек ҡаталарын онотоп ҡалдырыуы, ә иртән килгән кешеләр, был хәл боттоң үҙе менән бәйле берәй ғәләмәттер, тип уйлап, шул ҡаталарға табына башлауы хаҡында яҙып, хәҙерге заманда беҙҙең дә шундай аҙашыуҙарға тарыу ихтималлығыбыҙ тураһында хәүеф белдергәйнем.

Шөкөр, ете тиҫтә йыл дәһри дәүләттә йәшәһәк тә, диндең ни икәнен дөрөҫ аңлаусылар ҙа етерлек, Хаҡ Тәғәлә халҡыбыҙҙы көфөрлөккә төшөүҙән һаҡлап ҡалды. Закондарыбыҙ ҙа хәҙер дин тотоуҙан, өйрәнеүҙән тыймай — бары тик зыянлы ойошмалар йоғонтоһонан ғына һаҡ булырға кәрәк.

Әммә быуатҡа яҡын атеизм менән ағыуланған йәмғиәтебеҙ һаман да әле сирле хәлдә, борондан килгән рухи нигеҙҙәребеҙ ҡаҡшаған. Атеизм йәһәт кенә сигенә торған тәғлимәт түгел.

Шулай ҙа бәндәләрҙең динлеме, түгелме икәнлеген Раббыбыҙ үҙе генә белә. Алда телгә алынасаҡ танышымды ул үҙен шулай атағанға ғына ”дәһри” тиергә йөрьәт итәм.

Хаж ғибәҙәте ҡылып ҡайтҡанымды белгәс, мыҫҡыллыраҡ төҫ менән:

— Нисә Аллаһ бар һуң ул ер йөҙөндә: Ғайса, Мөхәммәт, Тәңре, Кришна, Будда... — тип һанап алып китте. — Һин шуларға ышанаһыңмы?

Ижтимағи фәндәр буйынса ғалим исеме йөрөткән был ағайҙың әйткәндәре дингә бик үк инмәгән сағымда, моғайын, ярһытыр, асыуымды килтерер, бәхәскә этәрер ине. Ә хәҙер ул йәлләү тойғоһо уятты — күпме нурҙан, Хаҡ Тәғәлә биргән рухи ниғмәттәрҙән мәхрүм ителгән бит был кеше! Юғары партия мәктәбендә атеистик китаптарҙы уҡый-уҡый аҙашҡан да, шул шырлыҡтан сыға алмай, унын үҙенә хатта иң дөрөҫ, иң хатаһыҙ юлдан барған кеүек тойола.

— Һуңғараҡ һөйләшербеҙ әле был хаҡта, — тип һүҙҙе икенсе юҫыҡҡа борҙом да, бер нисә көндән, яйын табып, әңгәмә башланым.

— Мөхәммәт ғәләйһи үә сәлләмде Аллаһ тиеүҙәрен һеҙҙән тәүгегә ишеттем әле — ул бит пәйғәмбәр, Аллаһ һүҙен бәндәләргә еткереүсе генә. Ғайса пәйғәмбәр хаҡында аҙашыуҙар бар, әммә Ислам бынан азат.

— Ә һин кемде Аллаһ тип һанайһың һуң?

Тауышында һаман тәкәбберлек барын ишетһәм дә, тыныс ҡына итеп яуаплайым:

— Һәммә ғаләмде, ерҙе, беҙ күргән һәм күрмәгән башҡа нәмәләрҙе барлыҡҡа килтергән көстө. Ҡөрьәндең 122-се сүрәһендә бөйөк был ҡөҙрәтте аңлатҡан иҫ киткес ябай һәм илаһи һүҙҙәр бар: Ҡулһу Аллаһу әхәдө Аллаһу самәдө ләм йәлид вә ләм йүләд үә ләм йә күлләһү күфүвән әхәдө. Аллаһ бер, Аллаһ мәңгелек, ул тыуҙырмаған һәм тыуҙырылмаған, уға бер тиңдәш юҡ.

— Берәүме, бөтәһен дә ул бер үҙе яралтҡанмы?

— Эйе.

— Ә нишләп беҙ Алланы күрмәйбеҙ?

— Әле килтерелгән аяттан күренеүенсә, уға тиңдәш юҡ. Ә беҙ үҙебеҙ белгән нәмәләр сигендә генә фекер йөрөтә алабыҙ. Тиңдәше юҡ икән,

нимә менән сағыштыра алабыҙ һуң? Беҙгә Алланың исемдәре рәүешле, аңыбыҙ етерлек кимәлдә генә, уның сифаттары мәғлүм ителгән. Тимәк, ул беҙ ябай күҙ менән күрер есемдән түгел. Әле хатта ғаләмде тотош күрер мөмкинлегебеҙ юҡ, ә уны барлыҡҡа килтергән зат йыһандан да бөйөгөрәк бит.

— Ә уның барлығын нисек иҫбат итә алаһың һуң, күренмәгәс тә, ишетелмәгәс тә...

— Ул ижад иткән емештәр күҙ алдында — ғаләмдә күпме йондоҙҙар, ерҙә күпме хикмәттәр. Беҙ бит әле әҙәм үҙе ижад иткән телефильмдарҙы ла махсус приборһыҙ — телевизорһыҙ күрә, ишетә алмайбыҙ. Башыбыҙҙағы уйҙар шулай уҡ күренмәй, тимәк, улар юҡмы? Мәгәр уй-ниәтебеҙҙең емешен күрә алабыҙ.

— Аллаң ерҙә бер нәмәне лә үҙгәртә алмай бит, бына, мәҫәлән, Ньютон законын юҡҡа сығара алмай.

Һорауҙың мәғәнәһеҙлегенә шаҡ ҡатам, әммә тыныс ҡына тауыш менән дауам итәм:

— Закон бит Алланыҡы, уны Ньютонға асырға бары тик насип ителгән.

Танышым бер аҙға ни тип әйтергә белмәй шымып ҡалды. Шунан йәнә ”дәлил” тапты:

— Ерҙә күпме ҡан ҡойош, ғәрәсәттәр, бәхетһеҙлектәр, нишләп ул тәртипкә һалмай, нимә ҡарап ултыра унда?

— Анау тиклем сикһеҙ ғаләмдә — иҫ киткес тәртип. Әгәр Аллаһ бер секундҡа ғына үҙ ғәмәлен туҡтатһа, ахырызаман башланыр ине.

— Башланмаҫ ине, был — физика законы.

— Физика түгел, Алланың законы, уны беҙ бары тик асҡанбыҙ ҙа физика тип атағанбыҙ. Химия ла, математика ла, ботаника менән зоология ла һәм башҡа һәммә фәндәр ҙә Аллаһы Тәғәләнең закондарын өйрәнә һәм кеше аңы билдәле бер кимәлгә үҫешкәс кенә Ғәлиебеҙ һәм Ғәлимебеҙ яңы асыш яһарға мөмкинлек бирә. Ә кешегә Аллаһ — аң һәм, йәшәү ҡануны булараҡ, изге китап биргән, һуңғы пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт саллалаһу ғәләйһи үә сәлләм аша ул кешелеккә иң камил ҡануннамә — Ҡөрьән индергән. Әгәр беҙ уның буйынса йәшәһәк, тормош-булмышыбыҙ шул хәлгә төшмәҫ, һуғыштар ҙа булмаҫ ине.

Һөйләшеүҙе телефон зеңгере өҙҙө. Яңынан әллә ни һүҙ ҡуйыртып торманыҡ, әммә ҡырҡа һуғып фекер йөрөтөүҙән туҡтауынан ағайҙың уйлана башлағаны һиҙемләнде. Әңгәмәсемә Һарун Яхъяның ”Күҙәнәк мөғжизәһе” тигән фильмын ҡалдырып, хушлаштым. Шөкөр, ғилемле кешеләр кимәленә иҫәпләнгән китаптар ҙа, аудио, видео материалдар ҙа бар хәҙер. Ризаитдин Фәхретдиндең һүҙҙәрен саҡ ҡына үҙгәртеп: ”Аҡыллы кеше динһеҙ ҡалмаҫ”, — тип әйтергә була.